ВОСХОД
№26 (10124)
Пятница
12 июля 2024 года
АРГАЯШ МЕДИА
ARGAYASH.COM

АРҒУЖА
БАШҠОРТ ТЕЛЕНДӘ МАХСУС БИТ №1 (154)
ИЮЛЬ 2024 ЙЫЛ

# «ТАҢ НУРҘАРЫ» НЫҢ ҮҘ ТАУЫШЫ

## АРҒАЯШ РАЙОНЫНЫҢ «ТАҢ НУРҘАРЫ» ӘҘӘБИ БЕРЕКМӘҺЕ ҮҘЕНЕҢ УТЫҘ ЙЫЛЛЫҒЫН ИЖАДИ ОСРАШЫУ МЕНӘН БИЛДӘЛӘНЕ

**ҠАМСА МОРТАЗИН,**
*Силәбе өлкәһенең Аҡмулла исемендәге әҙәби берекмәһе етәксеһе*
**(Римма Хибәтуллинаның фотоһы)**

Сараны Арғаяш районы башлығының социаль мәсьәләләр буйынса урынбаҫары Гөлнара Нурулла ҡыҙы Мусина асты. Үҙенең сығышында ул «Тан нурзары» ижад үсешенә һәм талантлы яҡташтарҙы үҙ тирәләй туплауға ҙур өлөш индерә, тип билдәләне. Юбилей уңайынан Гөлнара Нурулла ҡыҙы башҡорт мәҙәниәтен үстереүгә һәм туған телен һаҡлауға ҙур өлөш индергәне өсөн әҙәби берекмә ағзаларына район башлығының Почет грамоталарын тапшырҙы.

– Ошо йылдар эсендә берләшмә ағзалары өс әҙәби йыйынтыҡ – «Әйтер һүҙем бар», «Ҡурай моңдарына ҡушылып», «Башҡорт ҡыҙы мин» йыйынтыҡтарын баҫтырып сығарҙы. Ундан ашыу авторлыҡ һәм тыуған яҡты өйрәнеү китабы донъя күрҙе, – тип билдәләне үҙенең сығышында «Таң нурзары» етәксеһе Гөльәмал Нәзмиева.

Әҙәби түңәрәк ағзалары, башлыса, лирик шиғырҙар яҙа, уларҙың ижадында балаларға арналған шиғырҙары ла күреүгә оло ҡыуаныс. Әҙәби берекмәлә шөғөлләнеүселәрҙең төп темалары – тыуған яҡҡа, үҙенең бәләкәй Ватанына һөйөү һәм, әлбиттә, туған телгә ҡарата йылы мөнәсәбәт. Проза, ижади өлгөрөү күрһәткесе булараҡ, әлегә «Тан нурзары» өсөн һирәк күренеш, әммә 2015 йылда педагогик хеҙмәт ветераны



Лайыҡлы наград «Таң нурзары» етәксеһе Гөльямал Нәжмиеваға тапшырылды.

Сайма Фазылованың «Бибисара» повесы баҫылып сығыуы берләшмә өсөн яңы күренеш булды. Бөгөн ғалим-тарихсы Рәшит Хәкимов ысын уңыштарға өлгәшә. Уның «Яҡтылыҡҡа оҙон-оҙаҡ юл» повесы бер дворян ғаиләһе һәм XX быуат башындағы ижтимағи тормош тарихы тураһында бәйән итә. Был повесть Көньяҡ Уралдың әҙәби тормошонда үҙенсәлекле әҫәр тип танылды. 2023 йылда «Ватандаш» журналында баҫылған «Япон муллаһы, йәки имамдың ауыр юлы» тарихи романы авторға киң танылыу килтерә. Юбилей осрашыуында «Таң нурзары» ның тәүге ағзалары – күренекле тыуған яҡты өйрәнеүселәр Мәхмүт Янбаев менән Рафаэль Мөхәмәтйәновты иҫкә алдылар. Педагогик хеҙмәт ветерандары – Арғаяш районының Почетлы граждандары Зәйтүнә Хәйруллина һәм Сабира Шәрипова сығыш яһаны. Улар үҙҙәренең шиғырҙарын да уҡып ишеттерҙеләр. Сығыш яһаусыларҙың барыһы ла «Тан нурзары» етәкселәренә эшмәкәрлекте оҫта ойоштороғандары өсөн сикһеҙ рәхмәт белдерҙе.

ТӨБӘКТӘ әүҙем эшмәкәрлеге һәм ижади көстәр туплауға ҙур өлөш индергәндәре өсөн әҙәби берекмә ағзалары – Бәжәкәй урта дөйөм белем биреү мәктәбе уҡытыусыһы Гүзәл Фазылова, Силәбе һәм Ҡурған өлкәләре башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары Ассоциацияһы етәксеһе Зимфера Шафранская Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайының юғары наградаһы «Ал да нур сәс халҡыңа!» миҙалы менән бүләкләнде.

**БЕҘҘЕКЕЛӘРҘЕ БЕЛ!**

# Ул – Арғаяш еренең данлы улы

***Арғаяшта Арғаяш районының Почетлы граждыны, философия фәндәре докторы, Башҡортостан республикаһы фәндәр Академияһының ағза-корреспонденты, профессор, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы делегаты, педагог, ғалим, йәмәғәт эшмәкәре Дамир Жәүәт улы Вәлиевкә арналған «Вәлиев уҡыуҙары» үтте.***

Сарала ҡатнашыусыларҙы ҡунаҡсыл Көньяҡ Урал аграр колледжы ҡабул итте. Уҡыуҙарҙы үткәреү инициаторҙары – район Ҡоролтайының әүҙем ағзаһы Мәрзиә Сәғретдинова, Арғаяш муниципаль районы хакимиәте, Башҡортостан Республикаһының Силәбе өлкәһендәге вәкиллеге Әлфир Байымов, Силәбе өлкәһенең Тарихи-мәҙәни үҙәге Рауиль Әсәтуллин. «Вәлиев уҡыуҙарын» әҙерләүҙә Арғаяш районының Үҙәк китапхана системаһы хеҙмәткәрҙәре, тыуған яҡты өйрәнеүсе Флүрә Истамғолова, Яңы Сувыл мәктәбе коллективы ҙур эш башҡарҙы. «АЛТЫН ҠУРАЙ» проекты етәксеһе, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы ҡарамағындағы республика ата-әсәләр комиссияһы ағзаһы, этнолог Рушания Нишанова, колледж уҡытыусылары, Дамир Жәүәт улының туғандары менән берлектә сағыу һәм ҡыҙыҡлы сара уҙғарыу мөмкин булды. Билдәле яҡташыбыҙ, Д.Вәлиевтың шәхси йыйылмаһы тураһында башҡорт халыҡ йырҙарын оҫта башҡарыусы Венера Шәймөхәмәтова йылы һүҙҙәр әйтте. Арғаяш районы халҡы һәм



туғандары был билдәле кешенең тормошонан уникаль фотолар биргән. Уның эшмәкәрлегенә һәм ижадына арналған китап кәштәләре бик яҡшы әҙерләнгән. Осрашыуҙа ҡатнашыусыларҙың бөтә йырҙары, телмәрҙәре, сығыштары һәм хәтирәләре сағыу тәьҫир ҡалдыра. Дамир Жәүәт улының һеңлеһе, рәссам Сажиҙә Мәғәсумова уның бала сағы һәм йәшлеге, район башҡорттары ҡоролтайы активисы Мәрзиә Сәғретдинова студент йылдарында Свердловск университетында ғалим менән танышыуы хаҡында мауыҡтырғыс итеп һөйләне.

Дамир Жәүәт улының Өфөләге туғандарынан сәләмләү хаты, шулай уҡ Рәсәй фәндәр академияһы Өфө федераль тикшеренеү үҙәгенең тел һәм әҙәбиәт институты директоры Зөһрә Рәхмәтуллинаның һәм хеҙмәткәрҙәрҙең сәләмләү хаты һәм китаптарын тапшырыу хөрмәтенә эйә булдым. Минең докладым «Арғаяш районының почетлы гражданы Дамир Жәүәт улы Вәлиевтың ғилми мираҫында әхлаҡи потенциал» темаһына арналды. Әлбиттә, уның төп фекере көнүҙәк тема – йәштәрҙе тәрбиәләүгә йүнәлтелгәйне. Киләсәктә бындай сараларҙа йәштәрҙе, уҡыусыларҙы һәм студенттарҙы күберәк күрергә теләр инек. Арғаяш районы халҡының йөрәгендә һәм аңдарында ғалимдың иҫтәлеген хөрмәт итеүҙәрен, уның хеҙмәттәренән файҙаланыуҙарын аңлау сара ҡунаҡтарына ҙур тәьҫир ҡалдырҙы. Осрашыуҙа ҡатнашыусылар шулай уҡ район башлығы урынбаҫары Гөлнара Мусина хуплаған ошондай сараларҙы уҙғарыу тураһында үҙ ҡараштары тураһында фекер алышты. «Вәлиев уҡыуҙары»нда ҡатнашыусыларҙың барыһына ла, оҫта ойоштороусыларға ла ошондай сараларҙа уңыштар теләйем.

*Зөһрә САБИРОВА,*
*Өфө ҡалаһы.*
*Вәлиевтарҙың ғаилә архивынан Фото.*

**ӘЛФИР БАЙЫМОВ,**
*Башҡортостан Республикаһының Силәбе өлкәһендәге даими вәкиллеге етәксеһе*



**Арғаяштар өсөн билдәле совет һәм рәсәй ғалимы, дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре, профессор Дамир Вәлиев бик яҡын һәм үҙ кешеһе. Ул бында, Тыуған илгә һөйөү рухы менән һуғарылған бәрәкәтле башҡорт ерендә, тыуып үҫкән. Уны яҡташтары өсөн һәр ваҡыт терәк булған аҡһаҡал булараҡ хәтерләйҙәр. «Вәлиев уҡыуҙары»нда ҙур теләк менән ҡатнаштым. Ҡатнашыусылар араһында студенттарҙы ла күреү бик күңелле булды. Дамир Вәлиевтың фәнни мираҫы бөгөн дә өйрәнелеүенең һәм йәш быуынға тапшырылыуының дауам ителеүе мөһим. Башҡортостан Республикаһының Силәбе өлкәһендәге даими вәкиллегебеҙ башҡорт халҡының тарихын, мәҙәниәтен, йолаларын, телен һаҡлауға йүнәлтелгән бындай сараларҙы ойоштороуҙа һәр ваҡыт ярҙам итергә әҙер. «Вәлиев уҡыуҙары» төбәктәребеҙ араһында тағы ла бер юл күпһәтеүсе һәм дуҫлыҡ күпере буласаҡ, тип ышанам. Унан да бигерәк, өлкә халыҡ-ара Рәсулев һәм Аҡмулла уҡыуҙарын да ихласлыҡ менән үткәрә килә.**

ШИҒРИӘТ

# ТЫУҒАН ЯҠҠА ҺӨЙӨҮҘЕ ТАНЫУ

## «ТАН НУРЗАРЫ» АҒЗАЛАРЫНЫҢ ИЖАДЫНА АРНАЛҒАН

*Әйләнәм
дә йәшлегемә ҡайтам,
Хәтерҙә матур наҙлы яҙҙар.
Ҡыңғыраулы мәктәп
юлдарында
Табылды миңә ысын дуҫтар.
Әйләнәм
дә йәшлегемә ҡайтам,
Гармундарҙың сихри моңдары,
Йәйен таралыр ине урамда,
Күккә күтәреп күңелемде.
Әйләнәм
дә йәшлегемә ҡайтам,
Булмаһа ла ул илдәргә юл.
Күңелем бит
мәңге йәш ҡалыр тип,
Үҙ үҙемде тыйып ҡуям шул.*

**Г. Нәзмиева.**

*– Бәхетлеме һин? –
тип һораһағыҙ,
Мин әйтермен –
Эйе, әлбиттә.
Нисек мөмкин
бәхетһеҙ булырға,
Әгәр көтә ал нурлы иртә?
Әгәр тәбиғәттең
мөғжизәһен
Күрәм көн һайын мин,
шатланып.
Ҡояш нурҙарына иркәләнһәң,
Тыныслыҡ ҡала миндә ҡунып.
Бәхетле мин бөйөк
илем менән,
Ниндәй киң,
матур ул Ватаным.
Янымда туғандар,
дуҫтар, улым!
Был яҙмышыма –
мең рәхмәтем!*

**Г. Нәзмиева.**

*Сәскәләргә ғашиҡмын
Кеше ғүмерендә гөл-сәскәләр
Матурлыҡ тарата донъяға.
Сәскәләргә ҡарап
ғашиҡ булам,
Улар ғүмере ҡыҫҡа булһа ла.
Сәскә ғүмере
ҡыҫҡа тиһәләр ҙә
Күпме ергә ул нурын һибә.
Күпме ҡыуаныс,
шатлыҡ килтерә,
Беҙгә күпме ҡеүәт, көс бирә.
Юҡтыр уға
һоҡланмаған кеше,
Һәр берәүҙе үҙенә ул арбай.
Күҙ нурҙарын
һирпеп ҡарамайса,
Тыныс ҡына үтеп китә алмай.
Баҡсаларҙа күҙҙен яуын алып
Сәскәгә күмелә үрмә гөл.
Сәскәләрҙең ғүмере
бик ҡыҫҡа бит –
Өҙөп ташлап китә күрмәгеҙ.*

**З. Хәйруллина.**

### ЯМҒЫР ЯУ

*Ямғыр, һине оҙаҡ көттөк,
Зинһар өсөн, яу инде.
Яу-яу, ямғыр, нығыраҡ яу,
Ер дымға туйһын инде.
Әллә теләк ҡабул булды,
Әллә ваҡыты етте.
Ауылымда гөр-шау килеп
Ямғыр ҙа яуып үтте.*

**З. Хәйруллина.**

### ЯҢҒЫҘ ҠАЙЫН

*Яңғыҙ ҡайын үҫте күл янында,
Яңғыҙ үҫте бала сағымдан.
Ауылымдың бер
һаҡсыһы булып,
Күлдең ярын
ул ныҡ оҡшатҡан.
Юлдан килгән
кешеләргә булды
Ямғырҙан да ышығы уның.
Эҫе ҡояштан да ярҙам итте,
Һалҡын күләгәһе ҡайындың.
Ауылыма инде килгәнемдә
Яңғыҙ ҡайын ҡаршылап алды.
Еңел генә елдә япраҡтары
Тирбәләшеп миңә ҡыуанды.
Күл буйында юҡ
хәҙер ул ҡайын,
Ауыл осо яланғас ҡалды.
Ҡаршы алмай
мине ул ҡыуанып,
Ишетелмәй япраҡ тауышы.*

**З. Ғатауллина.**

### МИЛӘШ

*Көҙҙәр еткәс,
һалҡын елдәр иҫте,
Күктә ҡара болоттар йөҙә.
Һалҡын елдә,
ҡыҙыл тамсы кеүек,
Миләш еләктәре бәүелә.
Һалҡынайғас,
миләш япраҡтарын
Ерҙе ҡаплап, аҫҡа төшөрҙө.
Шаян елдәр уларҙы күтәреп
Һауаларҙа уйнап өйөрҙө.
Миләш еләктәре ҡыҙарышып,
Ҡыҙыл шәлдәй уны ҡапланы.
Хәҙер миләш
бирешмәй ҙә инде,
Иҫһә ҡыштын аҡ бурандары.*

**З. Ғатауллина.**

### КҮҢЕЛ ШИШМӘҺЕ

*Күңел шишмәһе
төпһөҙ икән,
Уның һыуы һәр саҡ мөлдөрәмә.
Йылдар артҡан
һайын ул киңәйә,
Юлдар оҙонайһа – дәртләнә.
Минең күңелем –
һалҡын шишмәме ни,
Шифа һыуын
тормош арттыра.
Йөрәгемдең
ялҡынлы тибеүҙәре
Тирә-яҡҡа нурын тарата.*

**А. Рамазанова.**

### ТЫУҒАН ЯҒЫМ – УРАЛЫМ

*Күк күлдәргә
ҡарап һоҡланамын,
Зәңгәр күккә уны тиңләйем.
Аҡ сәскәләр үҫкән аҡландарҙа
Ергә ятып күкмән тиңләйем.
Тыуған ерем минең –
сал Уралым!
Берҙән-берем, гүзәл төйәгем.
Һине һаҡлап ата-бабаларым
Яуға сығып өҙҙө ғүмерен...
Һалҡын шишмәләрҙең
һыуын эсеп
Йәндәремә дауа табамын.
Аҡбуҙаттар
сапҡан туғайҙарҙа
Силәк-силәк еләк йыямын.
Ҡайаларың һинең,
һай, Уралым!
Терәк, ҡеүәт, ғорурлыҡ илгә.
Батырҙарың һинең,
ай Уралым,
Тоғро булырҙар һәр саҡ һиңә.*

**А. Рамазанова.**



### МОҢ

*Әй, моң!!! Түҙ йөрәгем,
өҙөлөп ҡуйма, үҙәк!
Ошондай матур көй тыңлап,
туҡтап ҡалмаһын йөрәк.
Сылтырап аҡҡан шишмәнең,
былбыл ҡоштар тауышы,
Тәбиғәттең йыры бында,
бөтөн йыһан һағышы.
Урал тауын урап килеп,
йылғалар буйҙап аҡҡан,
Зәнгәр күккә менеп китеп,
минем күңелгә ҡунған.
Бик матур сит ил көйҙәре,
ҡайһы, уйымдан сыҡмаҫ,
Әммә башҡортом моңдары
үлгәндә лә он(о)толмаҫ...*

**Э. Яхин.**

### НӘСИХӘТ

*Тормош бит ул шундай нәмә
Ер шары кеүек әйләнә.
Бөгөн, һин яҡшылыҡ ҡылдың,
Иртән, рәхмәттәрен күрҙең.
Халыҡ заяға әйтмәгән:
“Нимә сәсәң – шуныураң.”
Бөгөн, алдап килештерҙең?
Иртән, хәсрәтлеккә ҡалдың.
Әгәр, үсне алам тигән,
Хыялдарға ҡалды ниһәң,
Һин белергә тейеш, әҙәм –
Яман ҡылып, яман ҡалаң.
Ғәфү итеп дошманыңды,
Дуҫ итергә тырыш уны.
Уға күрһәт ихтирамны,
Хоҙай ҡабул итер быны.
Ҡарғандырма кешеләрҙе,
Улар тик рәхмәтле булыр.
Бөгөн, “Иҫәнме?” тигәнең,
Сәләмәтлек булып ҡайтыр.
Һөт – һыйырҙан,
йөн – һарыҡтан,
Тауыҡ йомортҡа һала.
Һәммәһен Аллаһ яратҡан
Донъя аҡлығы шунда.
Ҡуҡрайып, намыҫһыҙланһаң,
Ғүмер итһәң вайымһыҙ.
Бел, дуҫым, ҡалырһың инде
Тамуҡта ла урынһыҙ.*

**Э. Яхин.**

*Яратам мин көҙөмдө
Көҙҙөң һары һағыштары
Ниңәлер миңә яҡын.
Әйтерһең, көҙгө ҡояш та
Һибә тик миңә ялҡын.
Һоро турғайҙың йыры ла
Күңелгә яғымлыраҡ.
Моңло ҡоштар киткәнгәме
Әллә ҡайҙарға йыраҡ?*

*Әкрен иҫкән көҙгө ел дә
Мине тулҡынландыра.
Әбей сыуағы көндәре
Хатта ҡанатландыра.
-Сер ул ниҙә? – тип һораһаң,
Яуабым күптән әҙер.
Көҙ – тәүге ейәнем тыуҙы,
Көҙ – байрам миңә хәҙер.*

**С. Шәрипова.**

### ЙӘЙГЕ ЯМҒЫР

*Бар тереклек әле уянмаған,
Төнгө ямғыр уны бәүеткән.
Ағастар ҙа йоҡлай,
үләндәр ҙә,
Әлһерәгән улар хуш еҫтән.
Бына тиҙҙән ҡояш күтәрелде,
Ергә һибеп сағыу нурҙарын.
Ер йылынғас, ямғыр һыуының
Юғарыға осто быуҙары.
Ағас япраҡтары ялтыраны,
Ямғыр һыуҙарына ҡойоноп.
Йәш үләндәр
күтәрелеп китте,
Күккә табан сөйөп моронон.
Ямғырҙан һуң ерем
рәхәт һулар,
Бар тәбиғәт һыуға туйыныр.
Ҡоротоға бирмә Ер-әсәне,
Зур хазинам-ямғыр, яу, ямғыр!*

**С. Шәрипова.**

*Ниңәлер ишетмәйем
телемде,
Онотолған уның күп һүҙҙәре.
Ҡыуанам,
ҡалған сыңлы йырҙары,
Оноттормаҫ,
ышанам, үҙемде.
Мин өндәшәм
күргән кешеләргә,
Тел барлығын эҙләп,
һорап, көтөп.
Яуабы юҡ. Мине көткәндәргә,
Үҙ телемә йөрөйөм юл төҙөп.
Дуҫҡайым, ниңә һин ояланың?
Туған өндәр сыҡмай үҙеңдән?
Йән өлөшөң –
һин уны күмәһең,
Башыңды тартаһың
үҙ көсөңдән?*

**А. Шәрипова.**

*Телем – саф һауа йәнемә,
Илем – таяныс уйыма.
Телем онотмаҫ илемде,
Илем онотмаҫ телемде.
Оноттормаҫ туған телде
Минең Миәсем һыуҙары.
Бирмәҫ иҫемдән юйырға
Атам-әсәмден һүҙҙәре.
Оноттормаҫ туған телде
Йәшел яландар еҫтәре.
Еләктәрҙең аңҡыуҙары,
Сәсәктең гүзәл төҫтәре.
Әсәм теле – сәсән теле,
Әйткәндәр ҙур шағирҙар.
Мин уларға тиңләшмәйем,
Дөрөҫ тим, әйткән һүҙҙәр.
Мең тапҡыр мин кабатлаһам,
Әйтергә мин арымам.
Туған телем – үҙ илемдә,
Минең илем – телемдә!*

**А. Шәрипова.**

*Тәүге ҡарға эҙҙәр һалдым,
Буран юйыр эҙҙәрҙе.
Аҡ ҡағыҙға һалған юлдар
Ҡалһын ине буранһыҙ.
Атлап барам, ҡар шығырҙай,
Хистәр тыуа күңелемдә.
Аҡ ҡар түгел, аҡ биләүҙә,
Ынйы ерем бишектә.*

*Шул сағында аңланым мин
Йәшәүемдең ҡәҙерен.
Был тормошҡа
мин килгәнмен
Йыйыр өсөн ер йәмен.*

**М. Камалов.**

### ТӨН

*Тыныс аға Ҡараһыуҡай,
Ҡамыштары шым ҡалған.
Ай ҙа көмөш сәңгелдәген
Һыу өҫтөнә төшөргән.
Яр ситендә яңғыҙ тирәк
Төңгө тыңлыҡты һаҡлай.
Һаҡта торған һалдат кеүек,
Баҫып тора, йоҡламай.
Төн. Тирә-яҡ тынып ҡалған,
Тартайҙар ҙа шауламай.
Тик шишмәлек
сылтыр-сылтыр,
Үҙ йырын гөрләп көйләй.*

**М. Камалов.**